«Ватан юлдары буйлап – 2017 йыл» исемле тыуған яҡты өйрәнеүсе уҡыусыларҙың тикшеренеү эше муниципаль конкурсы

“Тәбиғәт мираҫы” номинацияһы

# «Беҙҙең яҡ тауҙары»




**Әҙерләне: Теүәлбаева Гөлшат,**
**Башҡортостан Республикаһының**
**Учалы районы Мәҫкәү урта мәктәбенең**
**5 класс уҡыусыһы**
**Бәйләнеш телефоны: (34791) 43-6-46**

Етәксеһе: **Мәүлитова Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы,**
Башҡортостан Республикаһының
Учалы районы Мәҫкәү урта мәктәбенең
“Бөтә белергә теләйем” исемле
мәктәп түңәрәге етәксеһе
Бәйләнеш телефоны: (34791) 43-7-80
e-mail: mavletova1967@mail.ru


Мәҫкәү ауылы

# Тикшеренеү эшенең актуаллеге

«Һәр кеше үҙенең ете быуынын, ауылының һәм халҡының тарихын белергә тейеш», - тигән беҙҙең ат-бабалар. Һәм элек-электән үҙ балаларынан ошо ҡағиҙәне үтәүҙе талап иткән. Ләкин ер-һыу атамаларын һәм уларҙың тарихтарын улар яҙып бармағандар, ә бөгөнгө көндә эҙләнеүселәр өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Атамалар - халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, мәҙәниәтен сағылдырған тылсымлы бер көҙгө ул.

Матурлыҡты күрә белгән кешеләргә, тау тоҡомдарын йорт эштәрендә файҙаланырға, үләндәрен, емештәрен дауаланыу маҡсатында ҡулланырға, һәр тауҙың атамаһын белергә һәм тауҙарҙың файҙаһын күреп йәшәргә өндәйем.

- **Тикшеренеү объекты.** Мәҫкәү, Ташҡыя ауылдарын тирә-яҡлап уратып алған тауҙар. Темаға ярашлы әҙәбиәт. Оло кешеләр менән әңгәмә.
- **Эҙләнеү предметы.** Ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары, легендалар тураһында гәзиттәрҙә сыҡҡан материалдар.



# Тикшеренеү маҡсаты

Тыуған йәнтөйәгемдең мөғжизәле тәбиғәт ҡомартҡыларын асыҡлап, матур һәм бай тарихлы тауҙар барлығын халыҡҡа еткереү. Уларҙа ғорурлыҡ һәм тәбиғәт-әсәбеҙгә һаҡсыл ҡараш уятыу. Һәр тауҙың атамаһын белергә, йыраҡтан танып белергә, тау байлыҡтарын файҙаға ҡулланырға өйрәтеү. Иптәштәремдә ыныу уятыу.



**Эҙләнеү эшенең бурыстары**

- 1.Һәр тауҙың атамаһы, тарихы тураһында белешмә йыйыу;
- 2.Һәр тауҙың байлығын өйрәнеү.
- 3.Йәшмә таштарын сыҡҡан тауҙы табыу һәм өйрәнеү;

**Эҙләнеү эшенең гипотезаһы**

Әгәр ауылыңды яратһаң, уны уратып алған тәбиғәт һәйкәлдәрен, уның тарихи ҡомартҡыларын, рухи һәм матди байлыҡтарын
ауылыңдың



## Эҙләнеү эшенең методтары

- 1. Мәçкәү ауылы тарихын тикшереү һәм уның тәбиғәт байлыҡтары тураһында белешмә йыйыу.
- 2. Тауҙарҙы күҙәтеү, унда эҙләнеү, фотоға төшөрөү.

## Эҙләнеүҙең практик әһәмиәте



# I бүлек. Һәр тауҙың үҙ исеме, урыны

Ауылыбыҙ бик матур, төҙөк, өс урамдан тора. Тирә - яғын уратып алған тауҙар ауылым тәбиғәтенә йәм өҫтәй. Халыҡ беҙҙә иркен, мул йәшәй, мал көтә, бесән әҙерләйҙәр, емеш-еләк йыялар. Малсылыҡ фермаһы бөтһә лә, халыҡ эшһеҙ тормай. Ауылыбыҙ янындағы тауҙарҙың алыҫ йылдарҙан килгән яғымлы һәм мәғәнәле атамалары бар. Мин уларҙың килеп сығыу тарихын, үҙенсәлектәрен, хатта бөгөнгө хәл-торошон өйрәнеү маҡсатында күҙәтеп барам.

Беҙҙең яҡтың тау исемдәре: **Өлкәнтау, Сәлимтүбә, Ҡыртау, Ослотау, Уртатүбә, Аратүбә, Фәрхизә түбәһе, Оҙонғор тауы, Ялай тауы, Ҡара бәрән тауы, Сусаҡ тауы, Ҡасҡынбил, Олағыр тауы, Сәкәштау, Бүре ояһы, Барсын түбәһе, Ҡантүбә.**

# Өлкәнтау

Ауылға ингәс тә, ҡаршыһында, иң тәүҙә күҙгә ташланған ҙур, бейек тау бар. Уны *Өлкәнтау* тип йөрөтәләр. Ул башҡа тауҙарға ҡарағанда, ысынлап та ҙурыраҡ, текәрәк. Шуғалыр ҙа Өлкәнтау тип атағандарҙыр инде. Был тауҙың ысынға оҡшаш легендаһы йәшәй халыҡ телендә. Имеш, граждандар һуғышы ваҡытында аҡтар ундағы мәмерйә эргәһендә торған, ә ҡыҙылдар Ҡантүбәлә торған.

Өлкәнтау башҡа тауҙарға ҡарағанда үҙенең матурлығы менән ауылдаштарҙы, ҡунаҡтарҙы, айырыуса балаларҙы һәм йәштәрҙе үҙенә тартып, саҡырып тора. Яҙын ҡарҙан әрселеү менән бала-саға, йәштәр тауға үрмәләй башлай. Өҫтән ауыл ус төбөндәгеләй бик күркәм күренә. Ауылды шунда менеп фотоға төшөрөргә яраталар. Кисен ҡояш беҙҙә Өлкәнтау артына бата, ә Ҡантүбә тауы яғынан ҡалҡа.



# *Ҡантүбә*

Ауылдан дүрт саҡрым көнсығышҡа Верхне – Уральскиға барған юлда *Ҡантүбә* тигән тау бар. Был данлыҡлы түбәнең исемен граждандар һуғышынан килеп сыҡҡан, тиҙәр. Аҡтар менән ҡыҙылдар араһында ҡан ҡойғос һуғыштар булған. Блюхер етәкселегендәге Ҡыҙыл Армия Верхнеуралға ҡарата һөжүмгә күсә. Мәсҡәү ауылы аша үтеп, Яйыҡ йылғаһының икенсе яҡ ярында булған бәләкәй генә түбәгә ынтыла.Уларҙың ниәте ҡаланы һырт яғынан уратып алыу була. Ләкин батшаның атлы ғәскәре түбәнең икенсе яғынан йәйәүле Ҡыҙыл ғәскәргә ҡарата көслө һөжүм яһай. Ике арала булған алыш шундай көслө була, ҡан йылға булып аға.



# Б а р с ы н   т ү б ә һ е

Йәй көнө  ауылына  ялға ҡайтҡан кешеләр *Барсын* түбәһенә менеп төшәләр.  Был түбәнең дә үҙ тарихы бар. Барсын әбейҙең бер бөртөк Хашим тигән улы булған.  Уны һуғышҡа алғандар, летчик – офицер булып хеҙмәт иткән. Әсә   кеше шул түбәгә менеп улын көткән, тик ғәзизе яу ҡырынан ҡайтмаған. Шул һуғыш күпме кешенең күҙ йәшен түктергән.



# Ҡ а с ҡ ы н б и л   тауы

*Ҡасҡынбил* тауының легендаһы ла бик ҡыҙыҡ. Белорет яғындағы бер ауылдан өйөрө менән малды, беҙҙең яҡтағы түбәгә ҡыуып килтергәндәр. Малдар шул тауҙа ашап йөрөгәндәр. Был малды ҡасырып алып китеү арҡаһында, был түбәгә Ҡасҡынбил тип исем биргәндәр икән.



# *Келәтбар тауы*

*Келәтбар* тауын, имеш, берәүҙәр: “Борон бында байлыҡ йәшерелгән”, тип әйткәндәр. Шул “клад бар” тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан да инде уның исеме. Икенселәр фараз итеүенсә, тауҙар теҙелешеп келәт һымаҡ булып ултырған өсөн *Келәтбар* тип йөрөтөлә икән.



# *Мөхәббәт тауы*

*Мөхәббәт тауы.* Беҙҙең ауылда клуб булмаған ваҡытта йәштәр ошо тауға барып булғандар. Ул тау ауылға ҡаршы һөҙәк кенә битләү булып күренеп ята. Унда костёр яҡҡандар, уйнағандар, бейегәндәр, танышҡандар. Шуға был тау Мөхәббәт тауы тип атала.



# Олағыр тауы

*Олағыр* тауының тарихы ошолайыраҡ: өйөрө менән мал аҙашып был тауға килеп сыҡҡандар, ти. Хатта мал ҡасып, Ырымбур яҡтарынан да беҙҙең яҡтарға еткән булған. Һәм ошо тауға мал китһә, юғалыр булған. Кешеләр ҙә был тауҙа аҙашҡан, ти. Шуға был тау Олағыр исемен алып ҡалған.



# *Урта түбә*



# **II бүлек.** **Һәр тауҙың үҙ байлығы**

Ауылымдың мөғжизәле урынының береһе тип, *Өлкәнтауҙы* атар инем. Тауыбыҙ ҙурлығы, бейеклеге, матурлығы буйынса башҡа тауҙарҙан айырылып тора. Унын һул яғы буйлап тауға күтәрелһәң, тәрән-тәрән йырындар бар. Был йырындарҙы, ямғырҙан һуң тауҙан ағып төшкән, көслө йырғанаҡтар яһаған. Йылдан-йыл тау йыуылып йәшмә таштары күренә башланы. Тимәк, был тауҙа йәшмә ятҡылығы бар, тик әлегә өйрәнелмәгән. Өлкәнтау буйында йәшел, күгелйем, сыбар, юлаҡлы, таҫмалы, һары төҫтәге йәшмәләр бар. Ҡыҙылдары бик һирәк осрай. Ҡайһы берҙәре ҙур ғына, ер аҫты буйлап киткәндәре бар. Ҙур йәшмә ташы өҫтәренә ултырып ял итергә була. Ҡайһы берҙәре онталып тора. Ҡояш нурына ялтырап, әллә ҡайҙан матур күренеп ятҡандары бар.



# *Ҡара бәрән* тауы

*Ҡара бәрән* тауында емешле ағастар үҫә, ҡоштар ағастарында оялай, шишмә һыуы ағып ята.



*Оҙонғыр* тауында иҫ киткес матур сәскәләр үҫә. Ағастары күп. *Ослотауҙа* төрлө йәнлектәр йәшәй: бүре, ҡуян, бурһыҡ, терпеһе лә бар. *Ялай* тауының еләге, бәшмәге күп. Ниндәй генә тауға барһаҡ та буш ҡайтмайбыҙ, еләк – емешен, бәшмәктәрен йыйып, ҡыуанышып ҡайтабыҙ.



# III бүлек. Ни өсөн тауҙар кәрәк, уның файҙаһы

Беҙҙең яҡта тауҙар бик күп һәм бай. Йәй көнө тәмле еләктәрен ашап кинәнһәк, ҡышын яҡын ятҡан тауҙарында сана шыуабыҙ. Тауҙарҙан сыҡҡан таштарҙы йорт эштәрендә файҙаланабыҙ. Ағастарын утын итеп яғабыҙ. Тауҙан сыҡҡан шишмә һыуын эсәбеҙ.



# Тауҙар - элек-электән мал көтөү өсөн уңайлы урындар

Тауҙарҙа көтөүселәрҙең ғүмере үтә. Һутлы үләндәрен ашап, һыйыр малы, һарыҡ-кәзәләр һимерә. Тауҙар бит ул – тәбиғәт мираҫы. Уны өйрәнеп, һаҡлар кәрәк. Ул беҙҙән башҡа бер нәмә лә һорамай. Тауҙар беҙҙе ел-буранда һаҡлай. Ауылыбыҙ тауҙар арҡаһында ышыҡ урында ултыра. Бер ниндәй ҙә тәбиғәт афәттәре беҙгә ҡурҡыныс аямай. Тауҙар беҙгә кәрәк, беҙ уларҙың файҙаһын күреп йәшәйбеҙ.



# Йомғаҡлау

Тауҙар. Улар Ер шарының өнһөҙ һаҡсылары кеүек ғорур, мәғрүр баҫып торалар. Баштарын ниндәй генә болоттар сорнаһа ла, ел-дауылдар бәрһә лә, йәшендәр телһә лә, донъяға зарланмай ғорур баҫып тора улар. Ундағы матурлыҡты, хозурлыҡты һүҙ менән аңлатып бирерлек түгел, үҙ күҙең менән күреүгә етмәй. Тауҙар менән тауҙар ғына осрашмай, ә беҙ тәбиғәт мираҫы – тауҙарҙы, уларҙың матурлығын барып күрә алабыҙ. Туң булмайыҡ, дуҫтар, тарихҡа күҙ һалып, тәбиғәт һәйкәлдәрен өйрәнәйек, файҙаһын күрәйек, ҡәҙерләп йәшәйек.



# Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Атайым, Сафин Вәкиф Вәлит улы һөйләгәндәрҙән.

2. Ҡантүбә. Ж.Ғәлин мәҡәләһенән (10.10.2002, Яйыҡ, № 119), Мәҫкәү ауылы

3. Р.Бүләков мәҡәләһенән (22.04.2003, Яйыҡ, № 46

